## Йыһат Солтанов

# ЮҠ ИТЕЛГӘН БӨЙӨК ҺӘЙКӘЛ

## 1.Эпостарыбыҙ төйәге

*Сал боронго — теләһә ниндәй хәлдәрҙә лә бөтә киләсәк быуындар өсөн гәҙәттән тыш ҡыҙыклы дәүер булып ҡаласаҡ, сөнки ул үҙенән һуңғы бөтә югарыраҡ үҫештең нигеҙен тәшкил итә.*

***Ф. Энгельс.***

*Үткәндәрҙе хөрмәт итеү — бына мәгрифәтлелекте ҡырагайлыктан айырыусы һыҙат.*

***А.С. Пушкин.***

*Если обыкновенный человек не знает своего происхождения, то подобен обезьяне, заблудившейся в лесу; если не знает своего рода, то подобен дракону, сделанному из бирюзы; если не читает письмен, повествующих вообще о предках, то подобен потерянному, заблудившемуся ребенку.*

*Пятый далайлама **Агван Лубсан** (1617 – 1682).*

Бабаларыбыҙҙың рухын һаҡлаған ошо изге ерҙе барып күреү теләге әллә ҡасандан күңелемдә хыял булып йәшәне.

Бына, ниһәйәт, 1980 йылдың көҙө.

Күп йылдар һәм юлдар аша эҙләнеп килеп, сал һәм гүзәл эпостарыбыҙҙың төйәге булған Асылыкүл ярында баҫып торам. Ана ята һыу ситендә алтын тараҡ ялҡылдатып башҡорттоң *Арта-би сура Ана ҡото (Анахита) — Һыуһылыуыбыҙ* сәс тарап ултырған, уның алтмыш ҡолас оҙонлоғондағы ҡара-йылтыр толомдарына тотоноп, Заятүләк батырыбыҙ тылсымлы һыу аҫты батшалығына сумып төшөп киткән шыма яҫы таш (Өҫтәлташ). Ана тора яр башында, Ҡарағастау морононда, уның толпар Күкбуҙатын (ҡайһы бер варианттарҙа Аҡбуҙатын) бәйләп ҡалдырған урын. Бына һыуаҫты донъяһынан, ажарлы Аҡбуҙатҡа атланып, сыҫҡан һыртлы аҫыл ҡола йылҡыларҙың икһеҙ-сикһеҙ өйөрөн эйәртеп, Заятүләк һыу шарлатып килеп сыҡҡан, ер тетрәтеп менеп киткән һөҙәк үр. Аунап ята һыу ситендә Аҡбуҙаттың тояҡтары аҫтынан һынып-кубынып төшкән тирмә төбө дәүмәллек ҡаяташтар, ялпаҡ сағыл һырттарында уйылып ҡалған Аҡбуҙаттың оло ҡаҙан ҙурлыҡ тояҡ эҙҙәре... Быларҙы мин быуат башында ошо ерҙә тыуып үҫкән, заманында волисполком тарафынан «зерә юғары вазифа»ға — «Асылыкүлдең мөдире» итеп тәғәйенләнгән, хәҙер, сал ҡартлыҡ көнө килеп, аяҡ-ҡулдан ҡалып, урынында ҡуҙғала алмай ятҡан ауыл аҡһаҡалы Ҡасимов Әхмәтсолтан Әбелҡасим улын хәстә түшәгенән күтәреп торғоҙоп, һөйләтеп, уның тормош йәмәғәте Ғәтиә Шәймәрҙән ҡыҙынан һәм (шулай уҡ аяҡтан ҡалған) тағы ла бер ауыл ҡарты Ҡытаев Батыргәрәй Мөхәммәт-Гәрәй улынан да һорашып, бөтә ишеткәндәремде ҡағыҙға паспортлаштырып, һәм башҡалар аша ла юллап килеп күрҙем...

«Үткән тураһында хәстәрлек — бер үк ваҡытта киләсәк тураһында ла хәстәрлек ул, — ти ғалим. — үҙ ғаиләнде, үҙеңдең бала саҡ тәьҫораттарыңды, үҙ өйөңдө, үҙ мәктәбеңде, үҙ ауылыңды, үҙ ҡалаңды, үҙ илеңде, үҙ мәҙәниәтеңде һәм телеңде, бөтә Ер шарын һөйөү кешенең әхләҡи тотороҡлоғо өсөн кәрәк... Патриотизмға саҡырыу ғына аҙ, уны хәстәрлекле тәрбиәләргә — тыуған илгә, уның тарихына... мөхәббәт тәрбиәләргә кәрәк» (академик Д. Лихачев. Үҙеңә һәм киләсәк быуындарға. «Правда» гәзите, 1979, 10 ноябрь).

Ҡылғанлы сал дала уртаһында түп-түңәрәк ҡояш-тәңкәләй ялтлап ятҡан тылсымлы диңгеҙ (уны башҡаса атап булмай!) Асылыкүл, фирүзә төҫлө асыҡ-йәшел тулҡындарын ҡандай ҡыҙыл ҡырсынташлы тирәс-ярҙарына ҡағып, дәүерҙәрҙең серен һөйләп тә көйләп, утыҙ сажинлы яр текәһе аҫтында баҫалҡы ғына шаулай. Ул, моғайын, һеҙҙең тәрән дәүерҙәргә ерегеүсе күңел һәм рух тарихтарығыҙ, әҙәбиәт менән сәнғәт башланғыстарығыҙ бит өҙөлмәҫ алтын сылбырҙары менән миңә килеп тоташҡан, һеҙ әле минең сал иңемде ҡолас ташлап кискәнегеҙ, минең тәрән диңгеҙҙәй тулышҡан мең-мең йыллыҡ моң-серҙәремдең тамсыһын да ала алғанығыҙ юҡ, тип һамаҡлай...

Башҡорт әҙәбиәтенең күп томлы тарихын яҙыу алдынан «Ағиҙел»дең түңәрәк өҫтәле янында «Башҡорт әҙәбиәте тарихы хаҡында һөйләшеү» («Ағиҙел»/9, 1979) ваҡытында филология фәндәре кандидаты Вафа Әхмәҙиев әйткән фекерҙәр бик тә урынлы. «Билдәле булыуынса, тине ул, — башҡорт халҡының әҙәби мираҫы ике составлы — фольклорҙан һәм яҙма әҙәбиәттән тора. Былар икеһе бергә башҡорт халҡының революцияға тиклемге рухи мәҙәниәтенең ҙур бер өлөшөн тәшкил итә... План-проспектта фольклорҙың яҙма әҙәбиәткә йоғонтоһо мәсьәләһе үҙәк мәсьәләләрҙең береһе итеп ҡуйыла... Фольклор яҙма әҙәбиәткә образдар системаһы, поэтикаһы, теле, стиле, йөмәткеһе менән йоғонто яһай килгән һәм яҙма әҙәбиәттең халыҡсанлығын, милли үҙенсәлеген байытыусы сығанаҡ булып хеҙмәт иткән... Шуға күрә, әҙәбиәт тарихында ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары яҙма әҙәбиәткә мөнәсәбәтендә генә өйрәнелгән хәлдә лә, беренсе томдың инеш өлөшөндә халыҡ ижадының күләме, жанрҙары, йөкмәткеһе һәм рухи тормошта тотҡан ҙур роле хаҡында ентекле бер бөтөн һүҙ әйтелергә тейеш, тип уйлайым. Был беҙҙең әҙәбиәт тарихын байытасаҡ һәм революцияға тиклемге һүҙ сәнғәтенең үҫеше һәм характеры тураһында тулыраҡ фекер йөрөтөргә мөмкинлек бирәсәк». Тимәк, бик хаҡлы рәүештә, әҙәбиәтебеҙҙең алтын тамырҙарын тәшкил иткән фольклорға, уның әҙәбиәткә мөнәсәбәтен асыҡлауға ныҡ иғтибар биреләсәк «Әҙәбиәт тарихы» томында. Инде ошо изге маҡсатты үтәүҙең практик яҡтарына килһәк, был, баяғы түңәрәк өҫтәл тирәһендә һөйләшеүҙә ҡатнашҡан икенсе бер ғалим, филология фәндәре кандидаты Рәшит Шәкүр билдәләүенсә, «шул уҡ ваҡытта әҙәбиәт тарихын өйрәнеү туп-тура әҙәбиәткә һәм әҙәбиәтселәргә ҡағылмаған ҡайһы бер бүтән мәсьәләләрҙе лә ҡуясаҡ көн тәртибенә. Әҙәбиәт тарихсыһы, мәҫәлән, беренсенән, әҙәби күренештәрҙе һәм факттарҙы халыҡ тарихы, был тарихтың төрлө этаптары менән бәйләй һәм аңлата белергә тейеш. Икенсенән, беҙҙең белгестәр араһында ошо уҡ планда тарихи география тигән төшөнсәне иғтибарға алып эш итә белеү аҡһаңҡырай әле. Дөрөҫ, бында хәҙерге Башҡортостандың тарихи географияһына арналған махсус хеҙмәттәрҙең булмауына һылтанырға ла мөмкин. Ләкин барыбер һәр бер әҙәбиәтсе үҙе өйрәнгән дәүерҙе һәр йәһәттән дә яҡшы белергә бурыслы.

Әҙәбиәт белгестәре тарихсылар, археологтар, этнографтар, диалектологтар туплаған мәғлүмәттәргә таянған хәлдә генә үҙ фәндәренең серҙәрен дөрөҫ сисә аласаҡтар». Ҡиммәтле практик әһәмиәте булған аҙаҡкы һөйләм, ҡыҫҡа ғына әйткәндә, мәсьәләне *комплекслы* тикшереүгә ҡайтып ҡала; яҙма сығанаҡтар килеп етмәгән сал осорҙарҙың тарихын өйрәнгәндә был иң ышаныслы һәм емешле ысул булып тора.

Түңәрәк өҫтәл янындағы һөйләшеүҙә филология фәндәре доҡторы, профессор Ғайса Хөсәйенев тә алға һөрҙө ошо фекерҙе: «Милли әҙәбиәт тарихын халыҡ, ил тарихы, заман менән тығыҙ берлектә, төрлө әҙәбиәттәр менән бәйләнештә яҡтыртыу ғилми-тикшеренеү эштәренең методологик нигеҙҙәрен тағы ла камиллашҡаныраҡ, теоретик кимәлдең юғарыраҡ булыуын, *фәнни концепцияларҙың яңылығын* талап итә. Был иһә *традицион тикшереү методтары, күнегелгән алымдар менән генә сикләнмәйенсә, яңысараҡ, киңерәк тикшеренеү методтарын,* материалға системалы һәм *комплекслы* (мин баҫымланым. — Й.С.) килеүҙе һорай». Тимәк, махсус үҙ фәнен яҡшы белеү һәм ут күрше фәндәрҙән мәғлүмәтле булыу менән бергә, академик Н.И. Конрад һүҙҙәре менән әйткәндә, «...филолог ысын киң күләмдә тарихсы булырға тейеш» (Н.И. Конрад. Запад и Востоҡ. М., 1972, 11-енсе бит; артабан күрһәтелә: Н.И. Конрад).

Ә Башҡортостан һәм башҡорттарҙың боронғо һәм урта быуаттар тарихы — тыуған яҡтарыбыҙ үткәндәренең иң аҙ өйрәнелгән өлкәһе ул... Шул уҡ ваҡытта «Башҡортостан һәм башҡорттар тураһындағы тарихи белемдәрҙең дөйөм торошо, һәм шулай уҡ Башҡортостандың бик боронғо замандарҙан алып беҙҙең көндәргәсә дөйөмләштерелгән тарихын тыуҙырыу бурысының өлгөрөп еткәнлеге Башҡортостандың боронғо һәм урта быуаттар тарихының тоташ проблемалар теҙмәһен генә түгел, ә ул дәүерҙәрҙең системалаштырылған тарихын да эшләп биреүҙе кисектергеһеҙ итеп ҡуя» (Р.Г. Кузеев. Источники по истории Башкирии до XVI в. Ҡарағыҙ: Южноуральский археографический сборник, 1 сығарылыш, Өфө, 1973; 133 — 134-енсе бит-тәр; артабан күрһәтелә: Р.Г. Кузеев, ЮАС).



Яҙыулы таштарҙы ҡарау. Уңдан һулға Йыһат Солтанов, Талмас Ғарипов.

Ниғмәтулла Шоңҡаров фотоһы

Бөгөн башҡорт филологтары тарафынан шул йүнәлештә баш-корт әҙәбиәте-нең тәрән там-ырҙарын юллау эше башҡарыла башланы. Ул профессор Ғай-са Хөсәйенов-тың башҡорт-болғар этно-ҡультура бәй-

ләнештәре тура-һындағы фәһем-ле мәҡәләһендә («Ағиҙел»/11, 1980) урта быуат (болғар) осоронаса еткерелһә, башҡа ғалимдарыбыҙ хеҙмәттәрендә, мәҫәлән, профессор Әхнәф Кирейев мәҡәләләрендә һәм филология фәндәре кандидаты Мөхәммәтхәй Әхмәтовтың 1978 йыл Саратовта баҫылып сыҡҡан «Глагол в языке орхоно-енисейских памятников (в сравнительном плане с современным башкирским языком)» тигән китабында, башҡорт әҙәбиәте тарихының уғата элгәрерәк (VII — IX бб.) дәүере емешле тоҫмалланды. Төрки ырын (руна) һәйкәлдәре исемләнеп йөрөтөлгән, һәйкәлташтарға ырын хәрефтәре менән соҡоп яҙылған (ундай яҙыуҙар күптән түгел Башҡорт АССР-ы территорияһында ла табылды) был ядкәрҙәр, бөгөнгө фән донъяһы билдәләүенсә, «яҡшы эшкәртелгән» боронғо «төрки яҙма әҙәби теленең үрнәктәре» булып тора һәм «боронғо төркиҙәрҙең юғары кимәлдәге тел культураһына эйә булыуҙарын күрһәтә», «билдәле бер стилгә эйә» булған был һәйкәлдәр, «һис шикһеҙ, тел үҫешенең оҙайлы юлын сағылдыра» (академик А.Н. Кононов. Грамматика языка тюркских рунических памятников VII — IX вв., Л., 1980; 3-өнсө бит; артабан күрһәтелә: А.Н. Кононов). Иҫ киткес юғары мәҙәниәтле был әҙәби тел, С.Г. Кляшторный фекеренсә, VII — X быуаттарҙа хәҙерге Монголия, Көньяҡ Себер, Етеһыу аралығы ерҙәрендә таралған һәм ҡулланылған, билдәле бер яҙыу системаһы менән бәйләнгән берҙәм *иҫке төрки әҙәби теле* булып тора (А.Н. Кононов, 31 — 32-нсе биттәр) һәм ул тел диалекттар өҫтөндәге дөйөм әҙәби стандарт тәшкил итә (А.Н. Кононов, 39-ынсы бит).

Ләкин башҡорт әҙәбиәтенең (һәм башҡа ҡәрҙәш төрки телле әҙәбиәттәрҙең) тамыры барып осланған дәүер тап ошо тип әйтә алабыҙмы? Ғалимдар шундай юғары баһалаған VII — IX быуаттар ырын яҙма осоро әҙәбиәтебеҙ үҙенең шытып сығыуы менән үк өлгәшкәнме ошо юғары кимәлгә? Былай «һуҡты ла — күпте лә» булыуы мөмкин түгел, әлбиттә. Был ядкәрҙәр, ти ғалим, «уларҙың морфология һәм синтаксисының үҫешкәнлек дәрәжәһенә ҡарағанда, үҙҙәренә тиклемге әҙәби һәйкәлдәргә таянған булырға тейеш, улары, үкенескә күрә, беҙгә килеп етмәгәндәр. Йолуғ-тегин, үҙенең атаҡлы туғандары Күл-тегин менән Моғилән хандың эштәре һәм көндәре тураһындағы гүзәл ике тарихи хикәйәттең авторы, ошо һәйкәлдәрҙә сағылдырылған төрки яҙма-әҙәби телде бер үҙе тыуҙырыусы булыуы мөмкин түгел: уның да, һис шикһеҙ, элгәре булған, ул шуларҙың әҙәби тәжрибәһенә таянған» (А.Н. Кононов, 3-өнсө бит). Тарих яҙыу ана шул элгәрҙе табыуҙан ғибәрәт тә инде!

...Асылыкүлдең йөҙө тымыҡ — көлөп баҡҡан Көн (ҡояш) аҫтында бик ҙур түңәрәк көҙгөләй ялтлап ята ул. Күктәге Көн шул тәбиғәт көҙгөһөнөң уртаһында алтындай сағылып шәүләләнә, әйтерһең, башҡорт кешеһе бала саҡтан хоҙайбикә итеп ҙурлап күнеккән «Көн-Абай» (Көн-Өфө, Ҡәнифә) — «диңгеҙ-әсәй»ебеҙ Асылыкүл төбөнән сығып килә... Шундай тоҫмаллау тыуа: аҫыл күлгә исемде лә әллә Көн-ҡояшҡа бәйләп биргәндәрме икән ғәзиз бабалар? Әйтәйек, ҡылғанлы дала уртаһында түп-түңәрәк тере ҡояшты йөҙөндә балҡытып ятҡан түп-түңәрәк тылсым донъяһын Көн-ҡояшҡа табыныусы боронғолар, күк йөҙөндә көнө буйына арып килеп, төнгөлөккә ҡояш ҡуна торған урын тип иҫәпләмәгәндәрме? Сөнки иҫке риүәйәт-мифтарҙа Көн һәм Ай диңгеҙгә ҡуна, иртә менән диңгеҙҙән килеп сыға. Авеста, Ригведа тигән сал ҡомартҡы-китаптарҙа, шулар менән һуғарылған башҡорт эпостарында ҡояш Аҡбуҙат ҡиәфәтендә һынландырыла, Аҡбуҙат-

толпарҙы менгән йәки еккән батырҙар ҡояш юлынан күкте лә ҡыҙырып йөрөй, һыу аҫты донъяһына ла барып ҡайта. Тап бына ошо Асылыкүл төбөнән дә Заятүләк менгән Аҡбуҙат (Күкбуҙат), уға эйәргән сыҫҡан һыртлы ҡола йылҡылар сыҡҡан... Шуларға бәйле рәүештә, зиннәтле күлебеҙ боронғо бабалар телмәрендә әсә-ал-көн (һыу-ал ҡояш) — Әсәалкөн аталып, тора-бара «көн» һүҙе «көл»гә (мәҫәлән, ҡояш көлә, тибеҙ) әүерелеп, Әсәалкөл — Әсәлекөл — *Асылыкүл* килеп сыҡманымы икән? Сөнки тәүтел материалында «әс (әсә)» һүҙе «һыу» тигәнде аңлата, ә һуңғыраҡ дәүерҙәр тел факторы булған «асы» (горько) һүҙен дөрөҫләрлек бер ниндәй ҙә тоҙ заты юҡ татымаҡҡа һыуында, шулай уҡ уға ағып төшкән инештәр ҙә асыһыҙ... Һәр хәлдә, Асылыкүлебеҙ борон-борондан Көн-ҡояшҡа, уның ерҙәге тере кәүҙәләнеше Аҡбуҙатҡа бәйләнешле сал мифтарҙың, эпостарҙың төйәге булып килгән һәм ул ошолай ҡала ла. Был хәл үҙе беҙҙе донъя (мәҫәлән, шумер, египет, грек, иран-һинд) мифтары, эпостары, әҙәбиәте менән туп-тура бәйләй, башҡорт мифологияһын һәм әҙәбиәтен шулар менән сағыштырып өйрәнеү, уртаҡлыҡтар сатрашланған осорҙарҙы һәм әҫәрҙәрҙе барлау мөмкинлеген бирә түгелме? Асылыкүл янында ғына һаҡланып килеп еткән, ләкин ошоғаса йүнле иғтибарланмаған бик иҫке культ (табыныу) ҡорамы (храмы) Ҡаҙан-Таш был фекерҙе ҡотолғоһоҙ көн тәртибенә ҡуя.

Алыптар ғына ҡуҙғата алырлыҡ монолит күбәташтарҙан (валундарҙан), ҡаяташтарҙан ҡоролған тәбиғәттең үҙе тарафынан был ҡорам. Дөрөҫөрәге, урындағы тәбиғи материал Көнгә һ.б. Күк есемдәренә табыныу, ҡорбан салыу урыны рәүешендә ҡулайлаштырылған. Ул объект валундары, ҡаяташтары, шаҙра әҙәм йөҙөләй, иҫәпһеҙ күп ваҡ түңәрәк уйпаттар (Асылыкүлдән сыҡҡан сыҫҡан һыртлы ҡола йылҡылар — йондоҙ символдарымы?) менән иләкләнгән 3-4 төркөмдән тора. Үҙәк төркөмдөң түбәһендә монолит ташҡа боронғо әҙәм ҡулы менән һоҡланғыс матур уйып эшләнгән түп-түңәрәк ике ҙур ҡаҙан (Аҡбуҙат һәм Күкбуҙат — Көн һәм Ай символдары?) — сал боронғо замандарҙа бында ҡорбан салыу урыны булыуы хаҡында һөйләй. Көнгә һ.б. Күк есемдәренә арнап салынған (һалынған) йылҡы (Аҡбуҙат), болан (Күкбуҙат) итен, моғайын, ошо таш ҡаҙандарҙа яндырғандарҙыр — ике ҡаҙандың да эсе бер иле ҡара көйгән. Көнгә табыныусыларҙың тап ошоноң ише культ ҡорамдары үҙебеҙҙең боронғо Бәктора (Бактрия) дәүләтенә ҡараған йәки уның динен (Зороастризм) тотҡан Урта Азия, бигерәк тә хәҙерге Ҡырғыҙстан ерендә (С.М. Абрамзон. Предметы культа казахов, киргизов и каракалпаков. Ҡарағыҙ: Материальная культура и хозяйство народов Кавказа, Средней Азии и Казахстана. Л., 1978; 44 — 57-нсе биттәр), төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш Һиндостанда (Б.А. Литвинский. Древние кочевники «крыши мира». М., 1972; 137-нсе бит; артабан күрһәтелә: Б.А. Литвинский) күпләп табылған. Беҙҙең эраға тиклемге VII — V быуаттарҙан уҡ скифтар, сактар, савроматтар, массагеттар, дахтар, исседондар, сайрималар тигән исемдәр аҫтында билдәле булған һәм Бәктора дәүләте ҡәбиләләренең көслө берләшмәһен тәшкил иткән, донъяға һынлы сәнғәттең дә «кейек стиле» тигән юғары үрнәген биргән ғәзиз бабаларҙан ҡалған ҡомарткылар ул. Улар барыһы ла Көнгә (Ҡояшҡа) табынған, бөгөнгө башҡорт ғәҙәтенсә, «Ҡояш менән ант иткән» (Б.А. Литвинский, 152-нсе бит), уларҙың ҡәбиләләр берлегендә, иран телләләр менән бергә, беҙҙең төрки телләләр ҙә йәшәгән (проф. А.С. Аманжолов. «Совет Башҡортостаны» гәзите, 1980, 3 июнь. «Сал тарих менән хәбәрҙар» тигән мәҡәләлә).



Яҙыулы көмөш тәрилкә. Иссыҡ ҡорғаны

Ә ул сал Бәктора (Бактрия) дәүеренең төрки телле скиф-сак-савромат-массагет ҡәбиләләре араһында тап бөгөнгө башҡорттарҙың да бабалары булыуы ихтималмы һуң, тигән урынлы һорау тыуа. Хәҙер инде быға ышаныслы яуап бирергә мөмкин: ул иҫке (б.э. тиклемге VII — V бб.) дәүерҙәрҙәге өҫтә әйтелгән ҡәбиләләр берлегендә төрки телле ҡәбиләләр араһында бөгөнгө башҡорттоң бабалары ла ҡатнашҡан, хатта донъяға зороастризм динен биргән пәйғәмбәребеҙ Сураш-Тора ла (гректар Зороастр тип атаған) тап ошо Асылыкүл буйында тыуып, боронғо төрки-башҡорт телендә һөйләшкән. Был хәҙерге комплекслы тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе (алдараҡ күренер) ярҙамында ышанyслы асыҡлана һәм күренекле совет тюркологы академик С.Е. Маловтың тәрән тикшеренеүҙәре һөҙөмтәһендә бынан 30 йыл элек үк табылған ғилми хәҡиҡәт менән дөрөҫләнә. Академик С.Е. Малов тап беҙ тикшергән территорияла бик боронғо замандарҙа — б.э. тиклем V быуаттан да элегерәк телдәрҙең ике ныҡлы төркөмө йәшәгәнлеген өҙөп әйтте: 1) хазар-болғар-сыуаш һәм 2) башҡорт-ҡыпсаҡ-мишәр тел төркөмдәре («Советская тюркология» журналы, 1979/4; 62-нсе бит). 1970 йылда Алма-ата ҡалаһы янындағы Иссыҡ ҡорғанында археолог К.А. Акишев тапҡан иң боронғо (б.э. тиклем V быуат) *сак* тәү ырын (руна) яҙыуы ла (һүрәтен ҡарағыҙ) ошо фекерҙе дөрөҫләй: ул тап беҙҙеңсә — төрки-башҡорт телендә яҙылған булып сыҡты. Бына ул минең тарафтан уҡылған ике юллыҡ текст (тыныш билдәләрен мин ҡуйҙым):

*«Оло атаның улы, ана улы, әрә улы — эҫе ут, оло ут, әсә ут; эҫе ут, әр ут — оло ана ҡаған».*



Ырын яҙыуҙар. Минең ҡул күрһәтә. Н. Шоңҡаров фотоһы

Утка (Көнгә) табыныусы бабаларыбыҙҙың доғалығына оҡшай был. Ошо хәл фән донъяһында сак (әсәк, йәғни Әсә-Бүрегә тпабыныусы үҫәргән) ҡәбиләләр берлегендәге төрки телле ҡәбиләләрҙең тарихи юлын күҙаллау, уларҙың бөгөнгө тоҡомдарын барлау мөмкинлеген бирә. Уралдан алып Һинд оҡеанынаса, Ҡытай диңгеҙенән алып Дунайғаса һуҙылған территориялағы бөтә боронғо ҡәбиләләрҙең дине булып формалашҡан зороастризм идеология-һы (Авеста, Ригведа китаптары) баштан-аяҡ ана шул скиф-сак-савромат-сармат-массагет (йәғни башҡорт) бабалар донъяһының ғәж-әйеп образлы мифология-һына ереккән һәм шуның менән һуғарылған булып сыҡты. Археолог Н.А. Мәжитов үҙенең Мәскәү-ҙә «Наука» нәшриәтендә донъя күргән монографи-яһында башҡорт мифоло-гияһының зороастризм менән тығыҙ бәйле булыуы тураһында тос ҡына фекер әйтте һәм уны башҡорт ерлегендәге археологик ҡомартҡылар менән нигеҙләне (Н.А. Мажитов. Южный Урал в VII — XIV вв. М., 1977; 119 — 133-өнсө биттәр; артабан күрһәтелә: Н.А. Мажитов). Юғарыла тасуир ителгән, Асылыкүл буйында һаҡланып ҡалған ҡомартҡы, беҙҙеңсә, тап ана шуның дәлиле булып тора ла инде.

Эре-эре таштарҙан хасил был ҡорамға ныҒыраҡ иғтибар итһәң, эпостағы: «...Заятүләк менән Һыу-һылыуҙы хөрмәтләп күмә-ләр, ҡәберҙәрен эре-эре таштар

менән уратып өйөп ҡуялар» (Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Беренсе китап. Өфө, 1972; 196-нсы бит) тигән юлдарҙың ғәмәлдә Бал-ҡантауға түгел (унда быңдай билдәләр юҡ), ә ошо ҡорам торған тауға ҡарағанлығын да тояһың... Ләкин ҡорамдың әһәмиәте быны менән генә сикләнмәй. Мин унда бер мөһим сюрпризға тап булдым: ҡорамдың үҙәк төркөмөндә, ҡорбан сала торған ҡаҙандар соҡоп эшләнгән монолит эргәһендә, ҡояш сығышы яғына ҡаратып вертикаль тип әйтерлек (яҡынса 75 градус) сурайтып ҡуйылған алтарь («алтарь» һүҙе «ал-ат-әр», йәғни «ал-ут-ҡояш» тигәндән килә тип һанайым). Ҡорам үҙе ҡыҙыл төҫлө, сағыштырмаса йомшағыраҡ ҡомташтарҙан торһа, алтарь иһә сағыштырмаса ҡатыраҡ, аҡһыл төҫлөрәк ҡаяташ. Унда тәү ырын хәрефтәре менән Ал Көн-ҡояшҡа табыныу һүҙҙәре яҙылған, был яҙыуҙың боҙолмай һаҡланып ҡалған, ап-асыҡ уҡыла торған өлөшө ни бары дүрт юл ғына тәшкил итә, ләкин ул беҙгә аңлайышлы төрки-башҡорт телендә һәм *шиғыр* булараҡ тәрән зауыҡлы уҡыла.

Бабаларҙан ҡалған иҫке ырын яҙыуҙары... Был яҙма б.э. тиклемге сал быуаттарҙан алып беҙҙең эраның урта быуаттарынаса ҡулланылған, Орхон — Инәсәй ярҙарынан алып Скандинавия ярҙарынса һуҙылған ҙур арауыҡтағы ҡаяташтарҙа, ҡәбер таштарында, йоморо валундарҙа һаҡланып ҡалған. Шундай ҡомартҡыларҙың береһе күптән түгел республикабыҙҙың Саҡмағош районындағы Ҡалмаш йылғаһы буйынан табылғайны (һүрәте һәм яҙыуының күсермәһе «Советская тюркология» журналының 1980/2 һанында баҫылып сыҡты). Һәм бына ошо 1980 йылдың көҙөндә үк гүзәл Асылыкүл буйында ла ҡаяташҡа сыймаҡланған ошо ырын ядкәрҙең барлығын асыу бәхете тейҙе миңә.




Дөрөҫ, ундай иҫке яҙыуҙың сағыштырмаса йомшаҡ матер-иалда — ҡомташта оҙаҡ быуаттар буйына һаҡланып килеп етә алыуына шикләнеп ҡараусылар ҙа бар (күберәген нигилистар араһында). Ләкин улар киң йәмәғәтселек тараф-ынан (һәм үҙҙәре тарафынан да!) танылған әлеге Ҡалмаш Ядкәренең дә тап шундай уҡ «йомшаҡ» ташҡа яҙылыуын, һәм, ғөмүмән, таш (унан һуң бронза) ҡоралдар менән эш иткән бик боронғо бабаларҙың ҡаты

тоҡомдарға әллә ни «теше батмауын», шуға күрә һүрәт һәм яҙыуҙарын сағыштырмаса йомшағыраҡ материалға сый-маҡларға яратыуҙарын онотоп ебәрәләр, буғай. Шундай уҡ ҡомташ «дәфтәр»ҙәргә мәңгел-әштерелгән ядкәрҙәр ҡырыҫ тәбиғәтле Аляскала ла (Наваха индейҙары ерендә), Балхаш күленең төньяғында ла (Сары-арҡа) ошо көндәргәсә ел-ямғырҙан юйылмайынса килеп еткән. Ә бит Сары-арҡа ҡаяла-рын кеше ҡулы яңы палеолит осоронда — бынан 12 — 14 мең йылдар элек сыймаҡлаған! (Ҡарағыҙ: А.Г. Медоев. Гравюры на скалах. Алма-ата, 1979). Тимәк, Асылыкүл яҙыуының материалына шикләнеү аҡламай үҙен. Етмәһә, ундағы яҙыуҙар (иң иҫке заман ырыны!) үҙҙәре үк үҙҙәренең донъяла барлығын дәлилләй!

Хәйер, фәндәге асыштар тарихы үҙе шикләнеүҙәрҙән һәм шул шикте еңеп сығыуҙан тора лаһа. Үҙ ваҡытында зоолог А.В. Рюмин тарафынан Шүлгәнташ мәмерйәһендә асылған иҫке палеолит осоро һүрәттәрен дә археолог О.Н. Бадер тәүҙә шик аҫтына алғанлығы һәм хатта кире ҡаҡҡанлығы билдәле, һуңынан ул шул уҡ һүрәттәрҙе өйрәнеп һәм матбуғатта баҫтырып сығарып танылды... Асылыкүл ядкәренең дә етди ҡомартҡы булып ҡуйыуы ихтималлығын иҫәпкә алып һәм ул яҙыуҙы өйрәнергә (раҫларға йә кире ҡағырға) теләгән һәр кемгә уны мәғлүм итеү теләге менән, яҙыулы таштың һәм яҙыуҙың ҡулдан күсермәһен бирәмен. Авторҙың тоҫмаллауҙарын иһә тәүге фекер алышыу ғына итеп һанарға ла мөмкин. Әммә шуныһы мөһим: зороастризмдың Уралғаса (дөрөҫөрәге – Уралдан алып Һинд океанынаса!) киң йәйелеүе тураһында археолог Н.Г Мәжитов яҙып сыҡҡан тәрән мәғәнәле фекерҙе раҫлаусы ышаныслы материаль һәм яҙма дәлил итеп һаналырға хаҡлы был: алтарҙәге яҙыуҙа, Көнгә (Ҡояшҡа) табыныу һәм уны данлау һөйләмдәре араһында, Зороастризмдың нигеҙ таштарының береһен тәшкил итеүсе «арта» («уттың йәне», «ғәҙеллек» тигән мәғәнәлә Көн-ҡояштың эпитеты; ҡарағыҙ: Поэзия и проза Древнего Востоҡа. М., 1973; 707-нсе бит) тигән термин да бар. Шулай уҡ был аңлайышлы башҡорт телендәге иҫке текст яҙмабыҙҙың тарихын да, әҙәбиәтебеҙҙең тарихын да беҙҙең эраға тиклемге сал дәүерҙәргә этәрә...

Асылыкүл ҡаяһындағы сал ядкәрле был юлдар, күренеүенсә, бысаҡ (ҡасау) һымаҡ үткер ҡорал менән тәрән итеп киҫеп яҙылған булған, күп быуаттар дауамында таштың йөҙө ел-ямғырҙан ашалып, ырын уйымдары «һайыҡҡан» — яҙыу соҡорҙарының төбө ҡая йөҙө менән бер тигеҙләнә яҙған. Хәрефтәр урыны-урыны менән асыҡ, урыны-урыны менән пунктирҙар рәүешендә шәйләнә. Хәрефтәрҙең яҙылыу стиле һәм уларҙан һуңғы VII — IX быуаттар төрки ырын һәйкәлдәрендә булмаған, фәҡәт баяғы Ҡаҙағстандағы Иссыҡ ҡорғанында табылған яҙыуҙа һәм шул осорҙоң беҙгә билдәле булған, төрки-башҡортса уҡылған һарт һәм башҡа яҙыуҙарында ғына ҡабатланған бер нисә хәреф Асылыкүл алтаренең тәү ырын яҙыуын *кәм тигәндә* б.э. тиклемге VII — V быуаттарҙың (бынан 2700 — 2500 йылдар элек) ядкәре итеп билдәләргә мәжбүр итә (ә, бәлки, ул Сураш-Тораның үҙенең заманынан -- б.э. тиклемге XVII быуаттарҙан уҡ ҡалғандыр). «Урал батыр» эпосыбыҙҙың тексы зороастризмға тиклем булған тәүдинебеҙҙәге ҡорбан салыу, ҡан ҡойоу йолаһын хөкөм итеп кире ҡағыуҙан башланып, зороастризм идеологияһына һуғарылыуын иҫкә алһаҡ, ҡорбан итен яндырыуҙан ҡара көйгән ҡуш ҡаҙанлы был ҡорамды зороастризмдың яңы формалашыуы (б.э. тиклем XVII быуат), йәки хатта унан да элгәреге дәүер ҡомартҡыһы итеп ҡарарға

ла нигеҙ бирә. Сөнки Көн-ҡояшҡа табыныусылар идеологияһындағы Сураш-Тора (Зороастр) бәк реформаһына тиклем үк булған шул йола айырым урындарҙа зороастризм дәүерендә лә дауамланыуы билдәле (М.А. Дандамаев, В.Г. Луконин. Культура и экономика древнего Ирана. М., 1980; 320-нсе бит; артабан күрһәтелә: М.А. Дандамаев, В.Г. Луконин). Шуныһы ҡыҙыҡ: зороастризмдың тәүге осоронда Көн-ҡояшҡа арнап ысын мәғәнәһендәге ҡорам-биналар төҙөмәгәндәр, ә, тап ошо Асылыкүл янындағы тәбиғи ҡорам кеүек, асыҡ күк аҫтындағы тәбиғи объекттар эргәһендә табынғандар (М.А. Дандамаев, В.Г. Луконин. 327-нсе бит).

## 2. Асылыкүл ядкәренең уҡылышы

Текстың ҡайһылай уҡылышына тәғәйен күсеүҙән алда, ҡыҫҡалыҡ һәм уңайлыҡ өсөн, яҙыуҙың хәрефтәре номерланған күсермәһен барлайыҡ (өҫтәге һүрәт). Текст уңдан — һулға ҡарай уҡыла, яҙыу юлдары иһә өҫтән аҫҡа ҡарай теҙелә һәм дүрт юл тәшкил итә. Йәғни тәүге юл ҡаяның иң түрендәге горизонталь йүнәлештән уңдан һулға табан һыҙылып, икенсе юл йәнә уң яҡ ситтән аҫҡараҡ ҡыялатып төшә һәм аҫтараҡ тағы уң яҡ ситтән өҫкәрәк ҡыялатылған өсөнсө юл менән дауам итеп, һул яҡ ситтәге аҫтан өҫкә ҡарай текә ҡыялатып һыҙылған юл менән тамамлана.

Иҫке яҙыуҙарҙа ғәҙәттә һуҙынҡы хәрефтәр бик аҙ ҡулланылған, һүҙҙәр тартынҡылар менән генә яҙылып, уларға йәнәшә килергә тейешле һуҙынҡылар уҡыусы тарафынан «өҫтәп» уҡылған. Шул ҡағиҙәне иҫтә тотоп, VII — IX бб. Орхон — Инәсәй, б.э. тиклем VII — V бб. сак һәм һарт яҙма һәйкәлдәрендәге хәрефтәрҙең теүәл бабаһы булған был хәрефтәрҙең һәр береһенең, номерҙары буйынса, ниндәй өнгә тура килеүҙәрен билдәләйбеҙ:

1. Ҡ; 2. Н; 3. Н; 4. С; 5. Ө (сак яҙмаһы хәрефе); 6. Л (сак яҙмаһы хәрефе); 7. С (һарт яҙмаһындағы йомшаҡ С); 8. Е (сак яҙмаһы хәрефе); 9. И (һарт яҙмаһы хәрефе); 10. У; 11. Т; 12. С; 13. С; 14. Ҡ; 15. Д; 16. С (һарт яҙмаһындағы йомшаҡ С); 17. Б (сак яҙмаһындағы ҡаты Б); 18. Рт; 19. Б (йомшаҡ Б);20. Ҡ; 21. Д; 22. А (һарт яҙмаһындағы А); 23. Б; 24. Лт.

Текстың уҡылышы (йәйәләр эсендә — өҫтәлгән һуҙынҡылар):

(1) Ҡ(ө)н (а)н(а)с(ы) өл(ә)сей
(2) Ут с(ә)с ҡ(о)д
(3) (ә)с(ә) (а)б(а) (а)рт(а) б(и)
(4) Ҡ(о)д аб (а)лт

Йәғни үҙенсәлекле шиғри строфа хасил:

Көн анаһы өләсәй,
Ут сәс — ҡот!
Әсә-аба арта-би —
Ҡот аб алт.

Көн-ҡояштың «Өләсәй» (иғтибар итегеҙ: ҡағиҙәнән айырмалы рәүештә, донъялағы был иң оло титул бөтә һуҙынҡы хәрефтәре менән, тип әйтерлек, тулы яҙылған!) тип аталыуын ғына иҫкәртһәк, шиғырҙағы тәүге ике юл аңлашыла. Яҙыуҙың өсөнсө юлы иһә беҙҙе сал борон-борондан уҡ Уралда төйәкләнеп

йәшәгән *әрә* (арий) тоҡомдары — скиф-сак-сарт-савромат-сармат-массагет (бөтәһе бер тоҡом - башҡорттар) бабаларыбыҙҙың изге *асаба* (шиваизм) диненә илтеп тоташтыра. Уралдағы шул *әрә* тоҡомдары, билдәле булыуынса, б.э. тиклемге II меңенсе йылдар башында Кесе Азияны, Месопотамияны, Сирияны, Палестинаны яулап ала, ә шул уҡ б.э. тиклемге II меңенсе йылдар урталарында улар Һиндостанда ла нығына (Ригведа. Избранные гимны. М., 1972; 4-енсе бит). Улар табынған асаба-шива («сафа», «шифа» һүҙҙәребеҙ шунан киләме?) дине тәғлимәте буйынса, кешелек (тереклек) донъяһын үрсетеп-тотоп тороусы дүрт изге көс — тереклектең нигеҙ ташы бар. (шуға бәйле рәүештә, Шиваның хәләл яртыһы булған хоҙайбикәнең һыны дүрт йөҙлө, һигеҙ ҡуллы итеп кәүҙәләндерелгән). Беҙ тикшергән Асылыкүл яҙыуының өсөнсө юлында тап шул мөҡәддәс дүрт «нигеҙ ташы» аталған да инде: *әсә, аба, арта, би (әби).* Б.э. тиклемге VI быуаттарҙа Бәктора дәүләтенең бәге Сураш-Тора (Зороастр) бабабыҙ тәүдингә реформа үткәреп, Зороастризм дине барлыҡҡа килгәс, баяғы «нигеҙ ташы» өсәүгә ҡала: *әсә, аба, арта* (әҙәбиәттә ғәҙәттә уларҙың икеһе генә күрһәтелеп йөрөтөлә: *аша, арта*), ә хоҙайәсә һынлы Шива үҙе зороастризмдың Тереклек хоҙайбикәһе *Арта-би сура ана ҡото* (йәғни һыу инәһе Анахита-Һыуһылыу) булып әүерелә. (Шул осор Бәктора харабалары араһында өс йөҙлө итеп һынландырылған хоҙайбикә һүрәте табылған). Күренеүенсә, Асылыкүл алтарендә хоҙайбикә исеменең ҡыҫҡартылған варианты (Арта-би) бирелгән. Шул уҡ ваҡытта баяғы дүрт «нигеҙ ташы»ның тәүге икеһе (әсә, аба) бында башҡорттоң икенсе үҙатамаһы — *«асаба» (аçаба)* һүҙе булып тора...

Шулай итеп, Асылыкүлебеҙ буйындағы иҫке яҙыу беҙҙе туп-тура Һиндостан менән тоташтыра һәм быға һис тә ғәжәпләнергә ярамай. *Әрә* (башҡорт) тоҡомоноң бер өлөшө, изге Ағиҙел буйҙарынан изге Ҡаңғы (Ганг) һәм Инде (Инд) йылғалары буйҙарына барып урынлашҡандан һуң да, бабалар ере Уралда ҡалған ҡәрҙәштәре менән араны өҙмәгән — дәүерҙәр буйынса улар араһында каруандар йөрөп торған. Мәҫәлән, акаманаттар (ахеменидтар) державаһы сәскә атҡан б.э. тиклем VI быуаттың егерменсе йылдарында оло каруан юлы ошо державаны Ҡара диңгеҙҙең төньяғындағы далалар аша Уралға һәм Себергә тоташтырған, Урал алтыны шул юл буйлап төрлө илдәргә таралған (М.А. Дандамаев, В.Г. Луконин, 216-нсы бит).

Асылыкүл алтарендәге яҙыуҙың аҙаҡҡы дүртенсе юлы иһә «алты абаның (бабаның) ҡото» тигәнде аңлата. Тимәк, ер-һыу-тереклек хоҙайбикәһе *Әсә-аба арта-би* — алты баба тоҡомдарының хоҙайы, ҡот биреүсеһе булып тора, алтарҙәге яҙыуҙы ла шул тоҡомдар яҙғандыр. Билдәле булыуынса, башҡорт халҡы составындағы Түңгәүер һәм Әй ырыуҙары үҙҙәрен күктән осоп төшкән *алты аба* — «алты баба» тоҡомдары һанағандар. Ҡайһылыр бер осорҙа был туғандаш ырыуҙар Ҡуңғырат ҡәбиләләр берләшмәһен тәшкил иткән. Был юлдарҙың авторы ҡулында XVI быуат тәңкәһенең йөҙөнә сыйылған ҡыҙыҡлы *тамға яҙыу* бар, унда ошо алты бабаның күктән осоп төшөүе тураһындағы легенда хәбәр ителә һәм ундай оригиналь яҙыу өлгөһө күптән түгел Башҡортостандың Ҡалмаш йылғаһы буйында табылған иҫке ҡәбер ташындағы тамға яҙыуҙы уҡыр өсөн мөһим асҡыс булып тора.

Йомғаҡлабыраҡ әйткәндә, Асылыкүл ядкәрендәге сак, һарт иҫке яҙмаларына хас бөтә билдәләре был яҙыуҙы унан һуңыраҡ дәүер Орхон — Инәсәй

һәйкәлдәренән дә иҫкерәк, *кәм тигәндә* беҙҙең эраға тиклемге VII — V быуаттар менән билдәләргә һәм туған әҙәбиәтебеҙҙең шул осор шиғри үрнәге итеп һанарға мөмкинлек бирә. Ә шул дәүерҙәрҙә үк башҡорт теленең йәшәүе фәндә асыҡ билдәле. Академик «С.Е. Малов, әйтеп үтеүебеҙсә, б.э. тиклемге V быуаттан да элегерәк әле ике: 1) хазар-болғар-сыуаш һәм 2) башҡорт-ҡыпсаҡ-мишәр тел төркөмдәренең йәшәп килгәнлектәренә күрһәтте» («Советская тюркология» 1979/4 журналы, 62-нсе бит).

Иҫке тәүдинде реформалап үҙенең динен (зороастризм) башлап ебәреүсе Зороастр (Сураш-Тора) бәктең исем-шәрифе ни аңлата һуң? Уның Әсә-Бүрегә табыныусы үҫәргән-башҡорт бәге икәнлеген иҫтә тотһаҡ, ап-асыҡ аңлашыла: Зороастр -- Соро-Әсә-Тор (Бүре-Әсә-Түрә, йәғни Хоҙай). Әле лә бүрене башҡорт -- “Һоро” (Соро), урыҫ -- “Серый”, Америка индейҙары “Зорро” ти. Башҡортостан Республикаһының Йәнсура, Асҡын райондарында Сураш ауылдары, Кафҡазда Сурож ҡалаһы бар -- боронғо сураштора динле йәмғиәттең ярсыҡтарылыр, моғайын...

Тимәк, Асылыкүл буйында табылған тәү ырын — *иң иҫке* һәм Иссыҡ ҡорғаны сак тәү ырын яҙыуы тексынан ҡала донъяға әлегәсә мәғлүм ителгән икенсе генә дана сак *тәү ырын* яҙыуы тексы булып тора. Һәм ул беҙҙе, башҡорт мифологияһын бабаларыбыҙ сактар ҡатнашҡан сал Бәктора дәүләтенә, Бәктора бәге (магы, батшаһы) Сураш-Тора (Зороастр) донъяға тараҡкан дини идеологияны тотоусы боронғо Иран, Һиндостан һ.б. яҡтарҙың ҡәбиләләре, шул замандың әҙәбиәтен тәшкил иткән зороастризм ҡомартҡылары Авеста, Ригведа һ.б. иҫке әҫәрҙәр менән туп-тура тоташтыра, башҡорт эпостарын һәм әҙәбиәтен шулар менән бәйләп һәм сағыштырып өйрәнеүҙе талап итә.

Тимәк, шөйлә тәрән тарта икән тамырыбыҙ. Асылыкүл ядкәре быға дәлил.

### 3. Бөйөк тарихи һәйкәлде ҡурсаларға тырышыу

Ҡуйын дәфтәремә күсереп алып ҡайтҡан ырындарҙы уҡып аңлағандан һуң, кешелек донъяһы әһәмиәтендәге был бөйөк ҡомартҡының барлығын донъяға хәбәр итеү, уны киләсәк быуындар өсөн ҡурсалап ҡалдырыу теләге менән талпындым, әммә мине һис кем аңларға теләмәй, көндәлек матбағаларыбыҙға юлдар бикле булып сыҡты, сөнки ихлас талпыныштарым Коммунистар партияһының державаны үтәнән-үтә һуғарған идеологияһына тап килмәй: Урал -- Иҙел ареалының аборигендары фәҡәт иран телендә һәм угрофиндар телендә һөйләшкән, ә төрки телле башҡорт-килмешәк һис кем белмәгән яҡтарҙан Күк Уралға ни бары тик беҙҙең эраның XI быуатында ғына ел ыңғайына ҡамғаҡтай тәгәрләп килгән... Ҡыҫҡаса әйткәндә, Уралыбыҙҙы аҫаба-башҡорттоң табаны аҫтынан тайҙырыу сәйәсәте күкрәп-ҡотороп сәскә атҡан саҡ (ул сәйәсәт, үкенескә ҡаршы, әлегәсә һүрелмәй), ә шуға ҡарышыусыларға “уҫал милләтсе” мөһөрө сәпәлә ине...

Беренсе сиратта асышымды Хөкүмәткә һәм Рәсәйҙең Фәндәр Академияһына атҡарҙым:

**Председателю Совета Министров БАССР т. Акназарову З.Ш.**
**Копии: Институту Востоковедения АН СССР, г. Москва;**

**председателю Союза писателей Башкирии, Председателю Верховного Совета БАССР т. Мирзагитову А.М.**

Чрезвычайно важное дело не только государственного, но и общечеловеческого значения заставило меня не дожидаясь окончания напряженной хлебоуборочной страды в республике обратиться к Вам с ниже следующим заявлением.

2 сентября 1980 года на побережьи известного озера Асылыкуль в Давлекановском районе Башкирской АССР среди давно известных природных объектов мною опознан бесценный памятник природы, истории и культуры одновременно, а именно: связанный с культом Солнца-Акбузата (Белого Коня) жертвенник-храм под открытым небом наших древнейших скифско-сакско-массагетских предков — возможно, создателей бессмертных башкирских эпосов «Заятуляк и Хыухылыу», «Акбузат».

Названное культовое сооружение по всем признакам было посвящено Солнцу, Луне и звездам (в эпосе эти небесные светила фигурируют в образах Белого, Сивого коней и табуна саврасых коней с мышиными холками), где в их честь, по-видимому, приносились кровавые жертвы — обычай, осужденный в другом башкирском эпосе «Урал батыр». Это позволяет предварительно датировать возраст храма примерно дозороастрийской эпохой (не позднее VII — VI веками до н.э.). Подобные же культовые сооружения учеными были обнаружены в республиках Средней Азии, Северо-Западной Индии.

Но самое главное не в этом. Главный сюрприз, заставивший обратиться с настоящим заявлением, дожидался меня там же — четыре строки текста на скале, написанные древнейшими проторуническими буквами. Подобные письма учеными (К.А. Акишев) впервые были открыты в 1970 году в кургане Иссык близ г. Алма-Аты и признаны «старинными письменами — **древнейшими** не только в Казахстане, но и **во всей евразийской степи»** (V век до н.э.). Значит, данная надпись на берегу Асылыкуль может оказаться лишь вторым руническим текстом вообще, до сих пор обнаруженным на территории БАССР (после Чекмагушевского камня) и только вторым «сакским» проторуническим текстом вообще, до сих пор обнаруженным на всем Земном шаре. Поэтому данный письменный памятник нужно оценить как редчайщее культурное сокровище общечеловеческого значения и принять безотлагательно срочные меры для его сохранения, ибо объект буквально валяется под ногами у «дикарей-туристов» и ему уже нанесен огромный непоправимый ущерб: все древние надписи, кроме названных сохранившихся четырех строк (которые тоже частично пострадали от выветривания), безобразно испещрены личными «автографами» наших «диких» современников, орудовавших с зубилом и молотком, и безвозвратно уничтожены. Каждый день и каждый час от любой случайности может погибнуть и все остальное...

Учитывая тот факт, что пока единственный человек — я только знаю и другим могу показать то сокровище, а я, как человек, тоже не огражден от любых роковых случайностей;

сознавая высокую ответственность перед народом и человечеством, предлагаю:

1. Немедленно создать правительственную комиссию примерно из семи человек для освидетельствования и подтверждения на месте наличия выше названного культового сооружения и находящейся там проторунической надписи и для принятия срочные практические меры для их сохранения.

2. После авторитетного освидетельствования, фотографирования необходимо до прибытия из Москвы специалистов часть скалы с проторуническим текстом тотчас в присутствии правительственной комисси законсервировать (обкладывать кирпичной стенкой или другим строительным материалом). Потом памятник можно будет заменить точной копией, а оригинал передать в музей.

Предлагаемый примерный состав правительственной комиссии: (перечисляются фамилии).

Правительственную комиссию обеспечить:

1. Автотранспортом повышенной проходимости — на три дня;
2. Командировочными расходами на три дня;
3. В случае официального подтверждения наличия вышесказанного проторунического письменного памятника откомандировать в распоряжение комиссии из г. Давлеканово или из близлежащего Давлекановского совхоза на один день каменщика с необходимым для консервации инструментарием и стройматериалом.

**Зихат Султанов,** член Союза писателей СССР.

г. Уфа, 8 сентября 1980 г.



МЕСТО ДЛЯ НАКЛЕЕЙ

З/ (вид отправления) из г. Уфа за № 2341 (почт. квит.)

ценностью на ______ руб. с наложенным платежом на ____ руб. ____ коп., отправленное 11 сентября 1980 г. (число, месяц, год)

по адресу 101836, г. Москва, Центр, Армянский переулок, 2,

на имя Институту Востоковедения АН СССР

Вручено 16/9 1980 г. по доверенности (кому)

(календ. шт. дня получения уведомления)

Подпись руководителя предприятия связи (цеха, участка)

(место подписи)

(календ. шт. дня отправл. уведомления)

Обведенное жирной чертой заполняется отправителем

Ләкин тарихыбыҙ хөкүмәттәге берәүгә лә кәрәк түгел ине, буғай, сөнки бер яуап та килмәне. БАССР Верховный Советы рәйесе булып йөрөгән ҡәләмдәшем Ә.М. Мирзаһитовтың да бер ҡылы ла һелкенмәне. Быларҙың иҫе китмәгәс, Мәскәүҙең дә ике ятып бер төшөнә кермәйҙер, тип уйланым. Янып-көйөп,

түҙемлегем ҡаҡшап, З.Ш. Аҡназаровтың культура буйынса урынбаҫарына өндәштем:



Заместителю Председателя Совета Министров БАССР т.Сабитову

Прошу ответить на мое письмо от 8 сентября 1980 г. относительно обнаружения в районе озера Асылыкуль памятника культуры /проторуническая надпись на скале/.

Мой адрес:450055, г.Уфа - 55, Уфимское шоссе,4,кв.119,Султанову Зихату Адигамовичу.

Зихат Султанов, писатель.10 ноября 1980 г.

**Заместителю Председателя Совета Министров БАССР**
**т. Сабитову**

Прошу ответить на мое письмо от 8 сентября 1980 г. относительно обнаружения в районе озера Асылыкуль памятника культуры (проторуническая надпись на скале).

Мой адрес: 450055, г. Уфа — 55, Уфимское шосее, 4, кв. 119, Султанову Зихату Адигамовичу.

**Зихат Султанов,** писатель. 10 ноября 1980 г.

Ләкин быныһы ла һыуға төшкән балталай батып ҡалғас, Сабитовтың ҡабул ҡылыу бүлмәһенә юлыҡҡайным, унаң кабинет ишеге һағындағы сусылдап татарса һөйләшеүсе мосолман мәрйәһе үҙемде эттән алып-этҡә һалып әрләп сығарҙы...

Ә шулай ҙа баяғы хатымдың Мәскәүгә киткән копияһы ундағы кемделер ҡуҙғатып, юғарынан тороп уныһы Сабитовтың теңкәһенә тейҙе, буғай: был чиновник, ниһәйәт, үҙенсә эшмәкәрләнеп, Солтановтың өңөн тығылдыртырға шанлы ғалимдарыбыҙҙы мисәүләгән булып сыҡты: фән докторҙары Раил Кузеев, Талмас Ғарипов, фән кандидаты Наил Бикбулатов һәм фольклорсы-фотограф вазифаһындағы Ниғмәтулла Шоңҡаровтарҙан торған абруйлы экспедиция, мәшәҡәтләүсе Йыһат Солтановты ла яндарына алып, Асылыкүлгә йүнәлде. Эш шунда: ир-арыҫландарҙың һуңғыһынан башҡалары Мәскәүҙең "төркиҙәр Урал -- Иҙел арауығында фәҡәт XI быуатта ғына пәйҙә булған, ә ул ерҙең аборигендары -- иран телле һәм угрофин телләләр" тигән кире ҡағылмаҫлыҡ тәғлимәтен мөкиббән яҡлаусылар ине, ә этнограф Р. Кузеев шуларҙың лидеры ине. Машинала миңә ишеттереп юл буйынса шул тәғлимәтте тылҡынылар, Ҡаҙан-Таштың ырындарын да шул юҫыҡтан ҡаранылар. Һөҙөмтәлә "башына тай типкән" Й. Солтановтың асышын юҡҡа сығарып ҡайтып киттеләр (был «тарихи» ваҡиға «Ядкәр» тигән романымда сағылған). Оҙаҡламай Башҡортостан Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтынан төрлө тарафҡа атҡарылған рәсми ҡағыҙ дәүләт эше кешеләрен бимазалаусыны тамам төңөлдөрөргә, һуғып йығырға тейеш ине:



АКАДЕМИЯ НАУК СССР
БАШКИРСКИЙ ФИЛИАЛ
450025, Уфа-25, ГСП-99, ул. К. Маркса, 6
Для телеграмм: Уфа-25, Наука
Телетайп: Уфа, Наука, 238
Телефон 22-12-05
Расчетный счет № 18911435
в горуправлении Башконторы Госбанка г. Уфы

23.10.80 № 17110-17144-102

На № ________ от ________

Зам.председателя Совета Министров БАССР
т.Сабитову Г.В.

Копия: т. Султанову З.

Направляем Вам заключение специалистов по предварительному осмотру "памятника" на берегу озера Аслыкуль в Давлекановском районе.

И.о.председателя Президиума Башкирского филиала АН СССР Г.Фаттахутдинов

Абруйлы “белгестәр”ебеҙҙең яҙма “заключение”һын күрһәтеүҙе һорап ишектәрен шаҡығас, ҡырҡа баш тартып кире борҙолар...

Ныҡышлығыма барып, һис ятып тынмайынса, мәҡәләмде әҙерләп, республика органы “Совет Башҡортостаны” гәзитенә барҙым; әҙәбиәт бүлегендә теләктәшлек ҡаҙанып, ташҡа баҫып сығарырға әҙерләнеләр:



«Совет Башҡортостаны»

ЗАПАСКА

бирелгән материалдар паспорты

Бүлек Әҙәбиәт Авторы Йыһат Солтанов

Әҙерләне Тойғонов Машинкала баҫты Карамышева

Цитаталарҙы һәм башҡа мәғлүмәттәрҙе тикшерҙе

« 12 » ноябрь 198 1 г.

Бүлек мөдире

Секретариаттың вәкиле

Редактор урынбаҫары

" Асылыкүл ~~~~ " комартҡыһы "

/Эссе/

Үткәндәрҙе хөрмәт итеү – бына мәғрифәтселекте ҡырағайлыҡтан айырыусы һыҙат.

А.С. Пушкин.



ГИПОТЕЗЫ

## Тайна обелиска

Оказавшись в этом каменном урочище в Башкирии, писатель З. Султанов остановился, восхищенный открывшейся перед ним картиной. Кругом теснились причудливые глыбы красноватых камней, а посреди них обелиск — плита из белого песчаника. Подойдя ближе, Султанов увидел на нижней части камня царапины. На обелиске сохранились четыре строки текста.

Пять лет упорного труда потратил Зигат на разгадку текста. Вывод, к которому он пришел, отличался от существующих ныне концепций об истории заселения земель между Волгой и Уралом. Четверостишие оказалось... ритуальным гимном зороастрийцев.

Обелиск был не чем иным, доказывает его открыватель, как жертвенным алтарем. Под ним отчетливо видны два круглых котлообразных углубления — жертвенника. На их стенках сохранился черный нагар — верный признак былых традиций жертвоприношения. Исследователя поразил не только сам факт возможного проникновения в древности зороастризма на Урал, но и то, что названия ритуальных символов (солнце, воздух, вода, огонь, хлеб) сходились со старобашкирскими словами.

— Особенно, я считаю, велико значение третьей строки, — говорит Султанов. — Ибо начертанное там слово «Аса-Аба» представляет собою не что иное, как исконное самоназвание башкир-вотчинников «Асаба». И в то же время оно означает имя зороастрийского бога-жеребца «Асва» или «Асуа». Между прочим, башкиры до сих пор племенного жеребца называют «Асау».

М. МЕРЗАБЕКОВ.
(Наш соб. корр.).
Уфа.

"Советская Россия"
16 августа 1985 г.
№ 187, стр. 4.

Ләкин, ҡорҙашым һәм дуҫым Рәми Ғарипов әйтмешләй, ҡайҙа барһаҡ та ҡара һаҡалыбыҙ артыбыҙҙан ҡалмай эйәреп йөрөй икән шул: гәзиттең партия бүлеге мөдире Д. Мәһәҙиев, үҙенә хас уяулыҡ күрһәтеп, "сетерекле материал" тураһында этнограф Р. Кузеевтың үҙе менән кәңәшләшкән һәм... бына ул кире тибелеп "ҡайтҡан мал" инде алдығыҙҙа.

Шулай биш йыл үтеп киткәс, Асылыкүл ҡомартҡыһы менән "Советская Россия" гәзитенең Башҡортостандағы хәбәрсеһе М.М. Мырҙабәков ҡыҙыҡһынды һәм мин уға "Древние зороастрийцы на Урале" (02.03.1985), "Наши общие корни" (31.03.1985) тигән ике әйбер яҙып биргәйнем, гәзитендә шуларҙан уҡмаштырылған бармаҡ битендәй генә хәбәр килеп сыҡты -- ит күрмәгәнгә үпкә лә танһыҡ, тигәндәй, быныһы ла ярап һалды. Һәм бына Мырҙабәковтың үҙенән хат килде, конверт эсенә баяғы хәбәргә ҡарата Ленинград ғалимының фекерҙәре теркәлгән ҡағыҙ һалынғайны. Беҙҙең ғалимдар уйларға ла теләмәгәнде урыҫ ғалимы ярып һалған, әгәр ҡомартҡы ысын була ҡалһа, бөтә кешелек донъяһы тарихына ҡағылышлы әйтеп бөтөргөһөҙ ҡиммәткә эйә бит ул, тип белдереү менән бергә, төрки телләләр тураһында иҫкә лә алмайынса, әлеге лә баяғы шул иран телләләр һәм угрофин телләләр һәйкәле итеп ҡаралырға тейешлеген тумбыҡтан... Асылыкүл һәйкәленең әһәмиәтен аңлау йәһәтенән ифрат мөһим документ рәүешле күсерәм:

30 января 1986 г.

От Игнатова Михаила Дмитриевича, про-живающего по адресу: 191186. г. Ленинград, Мойка, 40, кв. 10.

Уважаемая Редакция газеты "Советская Россия"!

В Вашей гезете в номере от 16_августа 1985 года была опубликована небольшая заметка Вашего корреспондента М.М.Мерзабекова "Тайна обе-лиска" поступившая йз Уфы, где писалось о том, что башкирский писатель Зигат Султанов в каком-то каменном урочище в Башкирии обнаружил каменный обелиск с древними письменами, которые оказались четыремья строками текста из ритуальных гимнов зороастрийцев, т.е. отрывком из "Авесты".

Я не знаю в какой степени Вы отдаёте себе отчет в важности такого открытия для науки, окажись этот памятник палеографии подлинным, а не современной подделкой, что весьма вероятно. К сожалению, сообщение Вашего корреспондента слишком поверхностное и краткое и составлено в таких выражениях, что вызывает массу недоумений и вопросов. Прежде всего, хотелось бы узнать, известен ли факт существования этого архе-ологического памятника археологам Башкирии? Если они об этом не знают, то получается, что писатель З.Султанов в течение многих лет скрывал от них свою находку и заслуживает не похвал, а самого сурового "осуждения потому что первейший *долг каждого* "гражданина сообщать о подобных находках" соотвествующим научным учреждениям." Очень настараживает в заметке Вашего корреспондента стремление придать ореол подвига любительским /дилетантским/ научным изысканиям писателя З.Султанова, который, по словам Вашего корреспондента, потратил "пять лет упорного труда на разгадку /обнаруженного им "на каменном обелиске загадочного древнего текста". Писатель З.Султанов не может не знать о существовании Института Востоковедения, где Обнаруженный им загадочный текст прочли бы и разгадали ему за пять минут, будь эта надпись составлена на любой из известных науке древних систем письма. А если же обнаруженная З.Султановым надпись составлена на неизвестной пока науке системе письма, то я сомневаюсь, чтобы разгадка такой системы оказалась под силу непрофессионалу в этом трудном деле /по крайней мере таких примеров наука еще не знает/. Следовательно, напрашивается вывод, что эта надпись либо очень поздняя и составлена на какой-либо давно известной науке системе письма, или же подделка. Однако окончательный вывод по этому вопросу в любом случае должны делать спецалисты, но прежде всего - археологи, которые обязаны исследовать обнаруженный З.Султановым памятник на месте его нахождения.

Некоторые крупные востоковеды предпологают, что наиболее древние части "Авесты", т.н. "Гаты" были составлены где-то в районах Средней Азии, не исключая и нынешнюю Башкирию. /Самое обстоятельное освещение этого вопроса в современной научной литературе с подробнейшей библио-графией смотри, непример, в книге: М.А. Дандамаев, Б.Г. Луконин. "Культура и экономика древнего Ирана". Москва, 1980, стр. 308 и след., однако, цитируя указанных здесь авторов, ...в областях, где, как полагают, были составлены Гаты /т.е. в районах Средней Азии, включая и Башкирией .(Авт/, .пока НЕТ ПАМЯТНИКОВ НА /древних/ ИРАНСКИХ ЯЗЫКАХ". Отсюда Вы, уважаемая Редакция, можете представить то колоссальное научное значение находке такой надписи, в районе нынешней Башкирии, окажись эта надпись воистину подлинной и древней, да еще с текстом из "Авесты",. как это сообщается в заметке "Тайна обелиска" под рубрикой 'Гипотезы". Если сообщение Вашей газеты подтвердится, уверяю Вас<, -это было бы подлинной научной сенсацией.

Сообщению .э Вашей .таете я отнесся так серьезно потому, что сам занимаюсь вопросами финно-угр.ведения и многие факты в этой науке свидетельствуют о том, что в тот древний период, когда составлялись тесты г"Авесты" финно-угорские племена обитали .на территории нынешней Башкирии, а языки их и религия во многом были близки к древне-иранскому; об этом,, *в* частности, свидетельствует тот факт, что в их языках сохранилось.,до сих пор несколько сот слов,, происходящих от древнеиренского.. Вот почему мне хотелось бы от вас получить более подробные сведения о находке З.Султанова, и я был бы Вам чрезвычайно благодарен, если

сообщите мне его адрес или же адрес Вашего кор-респондента *в* Уфе М.Мерзабекова, чтобы я, смог списаться с ними и разузнать подробности о находке. А.может быть имеются уже какие-то публикации об этой находке, которые остались мне неизвестными? Если это так, то сообщите, пожалуйста, мне автора и название книги, чтобы я смог ознакомиться.

Заранее благодарю Вас!

С уважением



Асылыкүл ырын яҙыуын, уның сал тарихын халҡыма мәғлүм ҡылыу өсөн янып-көйөп йөрөүҙәремә ун йыл да үтеп китте. "Совет Башҡортостаны" гәзите тулы ҡанлы "Башҡортостан"ға әйләнеп, баш редакторы булып мәҙәниәтле һәм итәғәтле инсан Тәлғәт Сәғитов эшләй башлағас ҡына, ниһайәт, материалыма юл асылды, тик ул гәзиттә (1991 йыл, 11 -- 13 сентябрь һандары) "Асылыкүл ядкәренә мәрҫиә. Мәдхиәнең мәрҫиәгә әүерелеү тарихы" тигән ҡайғылы исем аҫтында баҫылып сыҡты. Шуныһына ҡыуандым: ырын яҙмаларҙың һүрәте, уларҙың уҡылыш тәртибе боҙолмай һәм үҙгәртелмәй бирелде. Мин белгән баш редакторҙарҙан ошондай уҡ яҡты күңелле йәнә берәү бар ине -- Вәли ағай Нафиҡов (урыны ожмахта булғыры!). Башҡаларын баш осомдағы шомло ҡара болоттай хәтерләйем.

## 4. Асылыкүл ядкәренә мәрҫиә

1991 йылдың 8 сентябре. Йәнә Асылыкүл буйы (Асыулыкүл тип әйтәһе килеп тора)...

Һаман-һаман әсенеп хәтерләйем: ядкәрле ташты зәхмәтле ҡулдарҙан һаҡлап ҡалдырырға тырышып, хөкүмәтебеҙгә мөрәжәғәт ҡылһам да, юҡ менән йөрөйһөң, тип, әрләп сығарҙылар (премьер-министр урынбаҫары Сабитов идаралығынан). Һис юғында баш ҡалаға алып ҡайтып ҡурсаларға тип, республика дәүләт музейының директорына (һуңынан билдәле хажи) инәлдем, тик уның йөк машинаһы юҡ, машинаһы булһа ла, бензины юҡ булып сыҡты...

Башты ташҡа ороуҙарым, урыҫ туғандар әйтмешләй, таш ҡоймаға бәргән борсаҡ һымаҡ кире ҡағылды ла билдәһеҙлек упҡынына убылды. Сере бының билдәле: тоталитар ҡоролоштоң милли сәйәсәтендә һинд-европа тел ғаиләһенә ҡарамаған халыҡтарҙың ысын тәрән тарихына урын юҡ; төбәктәге ғалимдар ҙа тоталитар ҡоролош түрәләренең усын ялар ҡустылары, көнләксөләре булып, кендектәренән юғарыраҡ ырғый алмайҙар ине шул... Беренсе йөҙ йыллыҡта уҡ башҡорт-һундар менән башҡорт-үҫәргәндәр үҙҙәренең донъя яратылғандан уҡ тәүтөйәге булған ошо ғәзиз Уралында бөтә ҡитғаға билдәле ҡеүәтле дәүләт ҡороп, мең йылдарғаса дәүләтселлеген һаҡлап, татар-монгол яуҙарында ғына бөлдөрөлөүе донъяға мәғлүм булһа ла, күренерҙе лә күрмәмешкә һалышып, хакимиәт тарафынан башҡорт халҡы 1917 йылдың октябренәсә телһеҙ, моңһоҙ, тарихһыҙ һәм йортһоҙ-ерһеҙ ҡара наҙан, дөмә һуҡыр ҡырағай — ел иҫкән яҡҡа

тәгәрләп йөрөүсе ҡамғаҡ рәүешендә (Мостай Кәрим) «маҡталып» тәрбиәләнде бит, унын донъя яратылыштан уҡ кендектәре берешкән Уралын табанынан тайҙыртырға тырыштылар — ҡайҙандыр ҡубынып килеп сыҡҡан килмешәк ярлығын фәнни яҡтан тырышып «нигеҙләнеләр». Ошо шойҡан Асылыкүл ядкәренең яҙмышын да хәл ҡылды: «Ун беренсе быуатҡа тиклем Уралда төркиҙәр булмаған — төрки ырын яҙыуҙың Уралда булыуы мөмкин түгел!..» (Р.Ғ. Кузеев) - тинеләр “ғалим”дарыбыҙ...

Асылыкүл... Исҡе эҙҙәремде буйлап ҡыҙырам. Һәүбән батырыбыҙ толпарын ҡамтарған Ҡарағастауҙың ҡаҡ башында ҡара усаҡ күмерҙәре ҡарая. Дегәнәктәй күҙҙе ҡырған үҙгәреш: Өфөнөң ҡайһылыр заводы кешеләре килеп, һәләкәтле тамға һалған изге яр яҡаһына. Һәүбән батырҙың Аҡбуҙатына ылығып һыу аҫты донъяһы батшалығынан сыҡкан һыртлы ҡола йылҡылар өйөрө яр башына эркелгән ғәзиздәрҙән-ғәзиз тәңгәл — Асылыкүлгә улаҡланып һөҙәкләнгән ялбыр-йолбор бүтәгәле ҡусҡыл үҙән — бейек тимер рәшәткәле ҡоймаға йоҙаҡланған. Рәшәткәле мут уратма уртаһында һаҫылығы үҙәккә үткес әбрәкәй, ике вагон, брезент палаткалар. Ҡара һаҡаллы әллә нисә тарамыш әрмән һәм ала-ҡола ҡыҙ-ҡырҡын, оҙон өҫтәл ҡыртышына араҡы шешәләре суҡайтып, кәрт һуғып ултырмаҡта. Асылыкүлдең ҡанһыраған ҡыҙылташ яры яҡаһында, алтмыш ҡолас толомло Һыуһылыу инәйебеҙ алтын тараҡ ялҡылдатып сәс тараған дүрткел ҡаяташ һыртында алкашйәнгә тартым ик бәндә ҡармаҡ һалып ултыра... Ә Ҡаҙан-Таш (изге алтарь) янына менгәс, йөрәгем өҙөлөп төшә яҙҙы: бабаларҙың һөрөм һырған ҡорбан салыу ҡаҙандарын яһилланып айҡағандар, эстәренә, сүкәйеп ултырып, хәшәрәт-нәжестәрен һалғандар, ә ҡаҙандарға тылсым биреп көнгә баҡкан алтарҙе, баяғы сал ырын ядкәрле ташты, ҡаҙнаһынан ҡуптарып алып киткәндәр... Кем ҡул һалған бабаларҙың изге аманатына, дөйөм кешелек донъяһы ҡомартҡыһына?!.

Йөрәгемде услап тотоп, ҡабат Асылыкүл буйына төшһәм, сыбыртҡы һөйрәгән 4 — 5 йәшлек ейәнен ҡулынан етәкләп, һыңар беләгенә буяуҙан бушаған тутыҡ ҡалай һауыттар, сүп-сар өймәләмә күнәген элеп, пенсия йәшендәге апай килеп сыҡты. Асылыкүлдең изге һыуына текә ярҙан сүп-сарлы күнәген түңкәрҙе лә күргәҙмә һабаҡ алған ейәнен эйәртеп ҡайтып китте, малай ҡулындағы сыбыртҡы осо оҙон ҡара йыландай һөйрәлеп барҙы. Һулышым ҡапланған хәлдә, ҡанһыраған яр аҫтына төңөлдөм, йәшел фәйрүзә тулҡындарға ҡуш ҡулымды сумырып һулҡылданым: «Ғәфү ҡыл, зинһар, беҙҙе, яһилдарыңды, әсәкәйебеҙ Асылыкүл!..»

7.12.1980 — 10.08.1991.